# Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә физик белем биреү эшмәкәрлегенең яҡынса тематик-перспектив планы



| Сентябрь | | | |
|---|---|---|---|
| 1-се аҙна | 2-се аҙна | 3-сө аҙна | 4-се аҙна |
| Балаларҙың физик үҫешен билдәләү диагностикаһы | Балаларҙың физик үҫешен билдәләү диагностикаһы | **Урмандағы йәнлектәр.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Урманда».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – өҫкә эленгән әйбергә һикереп тейеү;<br>2. Ү. – тубыҡҡа һәм усҡа таянып, әйбер араһынан үтеү;<br>3. Т.һ. – әйбер аша атлау.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – тупты уң һәм һул ҡул менән ҡапҡаға тәгәрләтеү: «Тейен сәтләүек йыя». | **Уңыш байрамы.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Уңыш байрамы».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – ҡырын итеп һыҙыҡ буйлап синхронлы атлау;<br>2. Т. – тупты вертикаль кәрзингә ташлау;<br>3. Һ. – әйбергә һикереп тейеү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – имгәкләп әйбер араһынан үтеү: «Терпеләр». |
| **Октябрь** | | | |
| **Ватан.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Ватаным буйлап».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – алға өйрәлтәп һикергес аша һикереү;<br>2. Ү. – гимнастик баҫҡысҡа үрмәләү;<br>3. Т.һ. – синхронлы атлау.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – тупты вертикаль кәрзингә ташлау: «Ҡояш-туп». | **Урманда.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Тубырсыҡтар».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – ете түңәрәккә баҫып атлап үтеү;<br>2. Т. – тупты иҙәнгә ҡаҡлыҡтырып алға хәрәкәт итеү;<br>3. Һ. – таяҡҡа атланып һикерәнләп йөрөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – гимнастик баҫҡысҡа үрмәләү: «Ағасҡа үрмәләү». | **Ҡырлы ҡурай.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Ҡырлы ҡурай».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – бейеклектән һикереп төшөү;<br>2. Ү. – эскәмйәлә шыуышыу;<br>3. Т.һ. – гимнастик аҙым менән атлап йөрөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – тупты иҙәнгә ҡаҡлыҡтырып, алға атлау: «Ҡурай буйлап». | **Математик стадион.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Тылсымлы кубиктар».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – күнегеүҙәр үтәп йөрөү;<br>2. Т. – бер-береңә баш аша туп ташлашыу;<br>3. Һ. – бейеклектән һикереп төшөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – эскәмйәлә шыуышыу: «Геометрик фигура». |



| Ноябрь | | | |
|---|---|---|---|
| 1-се аҙна | 2-се аҙна | 3-сө аҙна | 4-се аҙна |
| **Баҡсаға килгән ҡуян.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Баҡсаға килгән ҡуян».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – йүгереп килеп алыҫлыҡҡа һикереү;<br>2. Ү. – ҡоршау эсенә ҡырын инеү;<br>3. Т.һ. – иҙәндә ятҡан еп буйлап күнегеүҙәр эшләү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – бер-береңә баш аша туп ташлау: «Ҡуянға». | **Атҡайым-арғымағым.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Атҡайым-арғымағым».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – сүгәләп атлау;<br>2. Т. – тупты яурын тәңгәленән алыҫлыҡҡа ташлау;<br>3. Һ. – йүгереп килеп алыҫлыҡҡа һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – ҡоршау эсенә ҡырын инеү: «Ат аҫтынан йөрөү». | **Һунарсылар.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Һунарсылар».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – ҡоршауҙан ҡоршауға һикереү;<br>2. Ү. – әйберҙәр аша үрмәләп төшөү;<br>3. Т.һ. – сүгәләп атлау.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – тупты яурын тәңгәленән алыҫлыҡҡа ташлау: «Мәргәндәр». | **Алйот сысҡан балаһы тураһында әкиәт.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Сысҡан».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ . – тура дүртмөйөштәр араһынан зигзаг менән атлау;<br>2. Т. – тупты тәгәрләтеү һәм этәреп ебәреү;<br>3. Һ. – ҡоршауҙан ҡоршауға һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – әйберҙәр аша үрмәләп төшөү: «Сысҡандар». |
| **Декабрь** | | | |
| **Һуҡмаҡ ҡайҙа?**<br>II а) Д.Ү.К.: «Һуҡмаҡ ҡайҙа?»<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ.– әйләнеп торған оҙон һикергес аша һикереү;<br>2. Ү. – гимнастик баҫҡыстан аяҡтарҙы ҡуша баҫып атлап меneү;<br>3. Т.һ. – зигзаг менән атлап йөрөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – тупты алдында тәгәрләтеү һәм аяҡ менән этәреп ебәреү: «Туңдырғыс». | **Ифрат уңған.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Ифрат уңған».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – иҙәндә ятҡан баҫҡыс бүлектәре аша атлау;<br>2. Т. – тупты өҫкә ташлау һәм уны тотоу;<br>3. Һ. – әйләнеп торған оҙон һикергес аша ҡырын һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – гимнастик баҫҡыстан аяҡтарҙы ҡуша баҫып меneү: «Ҡышҡы ҡәлғәне алыу». | **Яңы йыл килә.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Яңы йыл килә».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – йүгереп килеп бейеклеккә һикереү;<br>2. Ү. – бейеклек аҫтынан тура һәм ҡырын үтеү;<br>3. Т.һ. – иҙәндә ятҡан баҫҡыс бүлектәре аша атлау.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – тупты өҫкә ташлап, уны урынынан тотоу: «Йылғыр туп». | **Был хәл булды ғинуарҙа.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Был хәл булды ғинуарҙа».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – еңелсә уңға-һулға әйләнеү;<br>2. Т. – ҡом тултырылған моҡсайҙарҙы хәрәкәт иткән сәпкә ташлау;<br>3. Һ. – йүгереп килеп бейеклеккә һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – бейеклек аҫтынан тура һәм ҡырын үтеү: «Ҡуяндар бүләк эҙләй». |

| Ғинуар | | | |
|---|---|---|---|
| 1-се аҙна | 2-се аҙна | 3-сө аҙна | 4-се аҙна |
| Ҡышҡы каникулдар | Раштыуа каникулдары | **Тау шыуғанда.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Тау шыуғанда».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – һикереп төшөү;<br>2. Ү. – эскәмйәлә ҡул менән тартылып арҡала ятып шыуыу;<br>3. Т.һ. – уңға, һулға еңелсә әйләнеп өйрөлөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – хәрәкәт иткән сәпкә ҡом тултырылған моҡсай ташлау: «Мәргәндәр». | **Ҡар бөртөктәре.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Ҡар бөртөктәре».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – гимнастик эскәмйәнән атлау;<br>2. Т. – туп менән кеглиҙарҙы ҡолатыу;<br>3. Һ. – эскәмйәнән һикереп төшөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – эскәмйәлә ҡул менән тартылып арҡала ятып шыуыу: «Санала». |
| **Февраль** | | | |
| **Сағылыларҙа урманға.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Сағылыларҙа урманға».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – иҙәндә ятҡан еп аша һикереү;<br>2. Ү. – алмашлап баҫып баҫҡыстан үрмәләү;<br>3. Т.һ. – гимнастик эскәмйәнән атлау.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – иҙәндән тупты тәгәрләтеп кеглиҙарҙы йығыу: «Ҡар йомғаҡтары». | **Һыуыҡ бабай, кит инде.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Һыуыҡ бабай, кит инде».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – канат буйлап ҡырын атлау;<br>2. Т. – иҙәндә шыуышып барып, ятҡан килеш кәүҙәне ҡалҡыта биреп, алыҫлыҡҡа ҡомло моҡсай ташлау;<br>3. Һ. – иҙәндә ятҡан еп аша команда буйынса һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – алмашлап баҫып баҫҡыстан үрмәләү: «Һыуыҡ». | **Әйтегеҙ әле, балалар!**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Әйтегеҙ әле, балалар!»<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – йүгереп килеп өҫкә ҡырын һикереү;<br>2. Ү. – коршауҙан ҡоршауға төрлө ысул менән инеү;<br>3. Т.һ. – канат буйлап ҡырын атлау.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – ятҡан килеш кәүҙәне ҡалҡыта биреп, алыҫлыҡҡа ҡомло моҡсай ташлау: «Мәргәнлеккә эстафета». | **Кем таба йөҙөктө?**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Кем таба йөҙөктө?»<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – тар эскәмйәнән аша атлап үтеү;<br>2. Т. – тупты төрлө торош-тан бер-береңә ташлау;<br>3. Һ. – диагональ буйлап йүгереп килеп өҫкә һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – ҡоршауҙан ҡоршауға төрлө ысул менән инеү: «Кем табыр йөҙөктө?» |



| Март | | | |
|---|---|---|---|
| 1-се аҙна | 2-се аҙна | 3-сө аҙна | 4-се аҙна |
| **Ҡайҙа икән, ҡайҙа яҙ?**<br>II. а) Д.Ү.К.: « Ҡайҙа икән, ҡайҙа яҙ?»<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – 6–8 тығыҙ туп аша һикереү;<br>2. Ү. – эскәмйәлә имгәкләп йөрөү;<br>3. Т.һ. – тар эскәмйәне аша йөрөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – аяҡты салып ултырып бер-береңә туп ташлау: «Һин – миңә, мин – һиңә». | **Ҡарға бутҡаһы.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Ҡарға бутҡаһы».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – уңға-һулға еңелсә әйләнеү;<br>2. Т. – тупты өҫкә ташлау һәм уны тотоу;<br>3. Һ. – 6–8 тығыҙ туп аша һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – эскәмйәлә дүрт тағанда имгәкләп йөрөү: «Күпер эстафетаһы». | **Ҡамыр батыр.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Ҡамыр батыр».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – йүгереп килеп алыҫлыҡҡа һикереү;<br>2. Ү. – гимнастик баҫҡысҡа аяҡтарҙы алмашлап баҫып үрмәләү;<br>3. Т.һ. – уңға-һулға еңелсә өйөрөлөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – тупты өҫкә ташлау һәм тотоу: «Мәргәндәр һәм состар». | **Һыу аҫты донъяһы.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Һыу төбөндә».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – арҡа менән артҡа табан атлап йөрөү;<br>2. Т. – тупты иҙәнгә ҡаҡлыҡтырып атлап барыу;<br>3. Һ. – йүгереп килеп алыҫлыҡҡа һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – гимнастик баҫҡыс буйлап үрмәләү: «Һигеҙаяҡтар һәм балыҡтар». |
| **Апрель** | | | |
| **Сүллектә.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Сүллектә».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – бер аяҡта алға һикереп барыу;<br>2. Ү. – терһәккә һәм тубыҡҡа таянып, имгәкләп йөрөү;<br>3. Т.һ. – арҡа менән артҡа табан атлап йөрөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – туп ҡаҡлыҡтырып алға барыу: «Минең шаян туп-ҡайым». | **Ике кәзә.**<br>II. а). Д.Ү.К.: «Ике кәзә».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – ҡытыршы ҡыя таҡта буйлап өҫкә менеү;<br>2. Т. – баш аша тупты артҡа һәм алға ҡулдан ҡулға ебәреү;<br>3. Һ. – бер аяҡта алға хәрәкәт итеп һикереп барыу.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – терһәккә һәм тубыҡҡа таянып, имгәкләп йөрөү: «Кәзәләр». | **Ҡояш менән ярышыу.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Ҡояш».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – йүгереп килеп бейеклеккә һикереү;<br>2. Ү. – гимнастик баҫҡысҡа аяҡтарҙы алмашлап баҫып, бер бүлектән икенсеһенә күсә барып үрмәләү;<br>3. Т.һ. – ҡытыршы ҡыя таҡта буйлап өҫкә менеү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – баш аша тупты артҡа һәм алға ҡулдан ҡулға ебәреү: «Тупҡайым-ҡояшҡайым». | **Мөғжизәле утрауҙа.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Мөғжизәле утрауҙа».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – гимнастик аҙым менән атлап йөрөү;<br>2. Т. – тупты горизонталь сәпкә аҫтан ташлау;<br>3. Һ. – йүгереп килеп бейеклеккә һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – гимнастик баҫҡыстан бер бүлектән икенсеһенә күсә барып үрмәләү: «Маймылдар». |

| Май | | | |
|---|---|---|---|
| 1-се аҙна | 2-се аҙна | 3-сө аҙна | 4-се аҙна |
| **Һабантуй.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Һабантуйҙа».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Һ. – түңәрәк буйлап ике аяҡлап уң һәм һул яҡҡа һикереү;<br>2. Ү. – йомшаҡ модулдәр аша үрмәләп менеп төшөү;<br>3. Т.һ. – башҡа әйбер һалып тура йүнәлештә һәм түңәрәк буйлап гимнастик аҙым менән атлап йөрөү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Т. – тупты горизонталь сәпкә аҫтан ташлау: «Кем оҫта ташлай?» | **Дуҫтар.**<br>II. а) Д.Ү.К.: «Дуҫтар».<br>б) Төп хәрәкәттәр:<br>1. Т.һ. – рейка аша тура, уң һәм һул аяҡ менән атлап сығыу;<br>2. Т. – тупты баскетбол кулсаһына тура һәм ҡабырғанан ҡырын тороп ташлау;<br>3. Һ. – түңәрәк буйлап ике аяҡта уң һәм һул яҡҡа һикереү.<br>в) Хәрәкәтле уйын: Ү. – йомшаҡ модулдәр аша үрмәләп менеп төшөү: «Бөжәктәр». | Балаларҙың физик үҫешен билдәләү диагностикаһы | Балаларҙың физик үҫешен билдәләү диагностикаһы |



## Мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн физик белем биреү эшмәкәрлеге өлгөләре

**Тема:** Урмандағы йәнлектәр (уйын).
**Маҡсат:** өҫкә эленгән әйбергә һикереп тейеүҙе өйрәнеү. Тубыҡта һәм ҡулдарға таянып имгәкләп әйберҙәр араһынан үтеүҙе, кубиктар аша атлап йөрөүҙе ҡабатлау. Тупты уң һәм һул ҡул менән ҡапҡаға тәгәрләтеүҙе уйын аша нығытыу. Дөйөм үҫеш күнегеүҙәрен дөрөҫ, теүәл үтәү, сәйәхәт аша физик культураға ҡыҙыҡһыныу, сыҙамлылыҡ, етеҙлек, үҙ һаулығына иғтибарлы булыуҙы үҫтереү.
**Йыһазландырыу:** епкә эленгән япраҡтар, кеглиҙар, кубиктар, туптар, ҡапҡалар.

| Дәрес өлөшө | Дәрес йөкмәткеһе | Күнегеү күләме | Методик алымдар |
|---|---|---|---|
| I. Инеш өлөш | Балалар, йәнлектәр көҙ көнө ни эшләй? Дөрөҫ, улар ҡышҡылыҡҡа әҙерләнәләр. Әйҙәгеҙ, беҙ урманға барып, йәнлектәрҙе ҡарайыҡ, күҙәтәйек. | | Теҙелешеп тороу. |
| | Беҙ йыйылдыҡ уйынға Йәнлектәргә ҡунаҡҡа. | | Атлап йөрөү. |
| | Айыуҙар ҙа бар бында, | | Ҡулдарҙы тирә-яҡҡа һуҙып, терһәктән бөгөп, аяҡтан аяҡҡа алпан-толпан атлау. |
| | Бүреләр ҙә бар бында, | | Эре аҙымлап атлап йөрөү. |
| | Төлкөләр ҙә бар бында, | | Аяҡтарҙы ишеп, ҡулды билгә ҡуйып атлап йөрөү. |
| | Ҡуяндар ҙа бар бында, | | Һикереп алға барыу. |